Контроль диктант

## II. КҮҢЕЛЛЕ ИНЕ УЛ САҠТАР.

Әсәһе сәләмәт саҡта, ҡайһылай күңелле ине! Улар ял көндәрендә Дим буйына сыға торғайнылар. Иртәнсәк тымыҡ урамдар буйлап селәүсен тултырылған ҡалай банка тотҡан һәм, мылтыҡлы һалдат һымаҡ, ҡармаҡ һаптарын иңбашына һалған Сәлих иң алдан бара; уның артынан биҙрә күтәргән әсәһе килә; ә иң арттан, йоҡоһо асылып етмәгән Рәшиҙәне елкәһенә атландырып, атаһы атлай.

Өфө ултырған тауҙан һоҡланғыс күренеш асыла: тау аҫтында Ағиҙел тын ғына ағып ята; уға һалынған тимер күпер аша, төтөнөн аҡ шарфтай елберләтеп, поезд сығып бара; күперҙән бер ни тиклем үрҙәрәк Ағиҙелгә тымыҡ Дим килеп ҡушыла; ә йылға аръяғында күҙ иңләмәҫ яландар һәм урмандар. Тиҙерәк шул урмандарға! Һәм Сәлих тау аҫтына йүгереп төшөп китә.

Дим буйында улар балыҡ тоталар, тәмле балыҡ һурпаһы бешерәләр, һыу керәләр, ҡомға ятып, ҡояшта ҡыҙыналар, туйғансы йоҡлайҙар һәм кисен генә, күҙ бәйләнер алдынан ғына, өйгә ҡайталар ине.

Ә хәҙер Сәлих бер ҡайҙа ла сыға алмай: ауырыу әсәһен, өҫ йәшлек һеңлеһе Рәшиҙәне ҡарар кеше юҡ. *(Х. Мохтар.)*

Д. й. 212-се бит